**Диктант текстары (рус мәктәптәре өсөн)**

1-се вариант

Бал алыу

Бына көткән көн килеп етә. Атайым лапаҫ түбәһенә ҡыҫтырып ҡуйылған сөрөктө аласыҡтан төтәтеп алып сыға, әсәйем ҙур ағас ашлауҙы, баллы кәрәҙ ҡырҡа торған оҙон бысаҡты әҙерләп, мине дегәнәк япраҡтары өҙөп алып килергә ебәрә. Ҡапҡасты бик һаҡлыҡ менән генә асырҙан алда, атайым мин алып килгән япраҡтарҙы һәйбәтләп умарта төбөнә түшәй. Сөрөктән осҡон фәлән төшөп, ерҙәге ҡоро-һары тоҡанып китмәһен, бысаҡ осонан төшөп китә ҡалһа, бал тупраҡҡа буялмаһын тип, япраҡ түшәгәнде беләм, шуға күрә уларҙың иң яҫыларын, ҡарышлауыҡтар тишкеләп бөтмәгәнен алып киләм. Бал ҡорттарын зәңгәр төтөн менән өшкөтөп умарта эсенә ҡыуалаған атайым да япраҡтарҙың ҙурлығына аптырап ҡуя хатта.

Беҙҙең ҡорт ҡарағанды әллә ҡайҙан белеп, ишек алдына бала-саға йыйылып китә. Батырыраҡтары кәртәләүгә атланып, умарта эсендә һалабаштан һыҙырған аҡ йүкә кеүек өҫтән аҫҡа тәңк-тәңк булып һуҙылған һәлмәк кәрәҙҙәрҙе атайымдың үткер бысаҡ осо менән ҡырҡҡанын, ашлауҙың өймәләм булып бал менән тулғанын ҡарап ултыралар. Әсәйем, мин алып килгән япраҡтар өҫтөнә ҙур-ҙур киҫәк кәрәҙле бал һалып, бөтә балаларға өләшеп сыға. Иптәштәрем ыңғайына мин дә япраҡҡа бал һалдырып алам. Шулай сикһеҙ тәмле күренә. (164 һүҙ) (Ф.Иҫәнғоловтан)

2-се вариант

Алыш

Ун-ун биш аҙым үттеме-юҡмы, йән тетрәтерлек ҡотһоҙ ырылдаған тауыш ишетелде. Был тоноҡ, дәһшәтле тауыштан бөтә урман геүләгән һымаҡ, ҺарыҒолаҡ нәмә менәндер алыша, буғай. Нурғатаның йөрәге жыулап китте. Ни эшләргә лә белмәйенсә, тиҙ генә бүре балаларын ергә һалды ла бер

һелтәүҙә йыуан имәнде киҫеп төшөрҙө. Шунан, бер ҡулына ошо һуйыл имәнде, икенсеһенә балтаһын тотоп, тауыш килгән яҡҡа атланы.
Йыуан муйынлы оло бүре Һарығолаҡты йыҡҡан да тегеләй ҙә, былай ҙа һелтәй. Ҡурҡыныс тауыш менән ғырылдап, быны алып ырғытырға ниәтләй ҙә ҡулынан килмәй, эттән дә ысҡына алмай, Һарығолаҡ аҙау тештәре менән бүренең боғаҙынан алған да ебәрмәй. Икеһе лә ҡанға туҙған, ағас ботаҡтарына йөндәре эләгеп ҡалған.
Үлемесле көрәш, күрәһең, байтаҡ барған, ҡан дошмандар арыған, Һарығолаҡтың көс ныҡ кәмегән булһа кәрәк. Ул ҡотолоу юлының бер генә нәмәлә — аҙау тештәрен бүре боғаҙынан нисек тә ысҡындырмай тотоуҙа икәнен яҡшы аңлай. Кеше килеүен тегеләр икеһе лә һиҙҙе. Был эткә көс өҫтәне, ә бүре, ҡурҡыныс яҡынлашҡанын һиҙеп, һуңғы көсө менән эттең тешенән ысҡынырға тырыша. (160 һүҙ) Р. Солтангәрәевтан).

3-сө вариант
Һабантуй
Һабантуйҙар етә башлаһа, беҙҙең яҡтар гөрләп тора инде ул. Нөгөш буйының хәтфә балаҫтай иң матур аҡланын һайлап алалар ҙа, майҙан яһап, ҡолға ултыртып, юл таҙартып, мәж киләләр. Был көнгә урамдар ялт иттереп һепереп ҡуйыла, тәҙрә ҡапҡастары, ҡойма, ҡалай түбәләр сағыу бояуҙарға буяла, флаг, лозунгылар эленә. Төндәр буйы ут һүндермәйенсә, еңгәйҙәр яулыҡ әҙерләй, таҫтамал остары сигә, ҡыҙҙар, батыр көрәшселәргә арнап, мамыҡ бирсәткә бәйләй, суҡлы түбәтәйҙәргә ынйы теҙә, ә инде уңған апайҙар, көр тауышлы йырсыларҙы иҫкә алып, ҡымыҙ бешә. Хатта ошоғаса бейеү түгел, саҡ-саҡ атлап йөрөгән һаҡаллы-мыйыҡлы ағайҙар ҙа, йөрәкһеп китеп, һандыҡ төптәренән баҫҡан һайын шығырҙап торған хром итектәрен сығарып кейәләр.
Хәйер, малайҙар халҡы ла йоҡлап йөрөмәй. Һабантуй һынлы һабантуйҙа ла көс һынашып ҡарамағас, ул нindәй егет булһын, ти, инде. Берәүҙәр һуғып

көршәк ватырға хыялланһа, икенселәре велосипеден көйләй, йүгереүгә әҙерләнә, йә булмаһа, йөҙөүҙе артығыраҡ күреп, һыу буйынан ҡайтып килмәй. Ә өсөнсөләре, ҡолға осондағы сигеүле күлдәктәрҙе хәтерләп, ҡаймаҡҡа юлыҡҡан бесәйҙән, буласаҡ майҙан тирәһендә сыуалыуын белә. (152 һүҙ). (Д. Бүләковтан).

4-се вариант

Ҡурғаш ҡашыҡ

Байназаровтың һуғыш юлында уның тәү күргән ҡазаһы — ҡашыҡ юғалтыу булды. Тоғона әсәһе һалып ебәргән йәлпәк башлы ҡурғаш ҡашыҡ ҡыҙыл вагонға ултырған төндө үк ғәйеп булды. Ғәйеп булды, тип, ни инде... Яуға барыуҙан ҡото осоп, вагондан үҙе һикереп төшөп ҡалмағандыр ҙа. Булмаç. Ул ҡурҡаҡ заттан түгел ине. Йәнтимерҙең атаһы Йәнбирҙе һалдат менән бергә әле теге герман һуғышынан йөрөп ҡайтҡан, яуҙарҙа һәм походтарҙа сыныҡҡан, донъяның әсеһен-сөсөһөн татып, күп ғибрәттәр алған булдыҡлы ҡашыҡ ине ул. Һурпа-бутҡаны котелоктан, табаҡтан, сүлмәктән ауыҙға, тамсыһын да ситкә төшөрмәй, бихисап ташыған егәрле, маһир ҡашыҡ ине. Өçтәүенә, уның уң сите, бысаҡ йөҙө рәүешле, сарланып, үткерләнеп бөткәйне. Йәнтимерҙең әсәһе — сулаҡ Гөлгәйшә еңгә, ҡаҙан төбөн ҡыра-ҡыра, шул хәлгә килтерҙе уны. Ябай ҡашыҡ ҡына түгел, һуғышсан ҡорал ине ул. Ундайҙар үҙ ирке менән пост ташлап китмәй — йә яна, йә һына. Улымдың юлдашы ышаныслы булыр, тип ихлас уйлағайны Гөлгәйшә еңгә. Ғәмәлдә ана нисек булып сыҡты бит. (150 һүҙ) (М. Кәримдән).